*Азат ЯРМУЛЛИН*

# Башҡорт армияһы сардарҙары Ишмырҙиндар



*Әүхәҙей Ишмырҙин*

2017 йылда Башҡортостан Республикаһының ойошторолоуына 100 йыл туласаҡ. Тупраҡлы мөхтәриәт өсөн көрәштә фиҙакәрлек күрһәткән күп кенә ир-уҙамандарының исемдәре әле халыҡҡа киң билдәле түгел. Уларҙың эшмәкәрлеге лә әлегә тейешенсә баһа алмаған, үкенескә ҡаршы. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте лидеры Әхмәтзәки Вәлидиҙең көрәштәштәре араһында яҡташтары күп булғанлығы билдәле. Улар милли хәрәкәттә хатта тотош ғаилә, ырыу-нәҫеле менән бергә ҡатнашҡан. Шулар араһында бер туған Әүхәҙей һәм Сөләймән Ишмырҙиндар милли хәрәкәт тарихында сағыу эҙ ҡалдырған шәхестәр рәтендә.

Ишмырҙиндар Ишембай районы Ҡинйәбулат ауылынан, Башҡортостанға автономия яулау хәрәкәтендә башҡорт ғәскәрҙәренә етәкселек иткән офицерҙар була. Әүхәҙей менән Сөләймәнгә аталары Ғәләүетдин яҡшы белем бирә. Әйткәндәй, ул үҙе лә заманына күрә алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы зат. Йәш сағында фельдшер һөнәренә өйрәнеп, 37 йыл ғүмерен ошо эшкә арнай. “Өфө губернаһының 1917 йылғы адрес-календары”нда (белешмәлә) Ғәләүетдин Ишмырҙиндың да исеме телгә алынған. Унда ул Стәрлетамаҡ өйәҙенең Татьяновка улысы почта бүлегенең поверенныйҙар (адвокаттар) советы ағзаһы, тип теркәлгән. Тимәк, Ғ.Ишмырҙин фельдшерлыҡ менән генә түгел, кеше хоҡуҡтарын яҡлау эше менән дә шөғөлләнгән.

Әүхәҙей — Ғәләүетдин Ишмырҙиндың икенсе улы. Тыуған йылы яҡынса 1890 йылдарҙың башы. Зирәк малайға атаһы тәү сиратта донъяуи белем бирергә тырыша. Уны Ергән ауылындағы 2 синыфлы урыҫ-башҡорт мәктәбенә уҡырға бирә. Бында Әүхәҙей урыҫ телен яҡшы үҙләштерә. Артабан Ҡазан ҡалаһында уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. Тыуған яғына ҡайтып, Стәрле ҡалаһында мөғәллим булып эшләй. Бында ул һабын етештереүсе Вәликәй сауҙагәрҙең Хәҙисә исемле ҡыҙын кәләш итеп ала. Тиҙҙән улдары тыуа, уға Исхаҡ тип исем ҡушалар.

Шулай итеп, һәүетемсә барған Әүхәҙейҙең тормошон 1914 йылда тоҡанған Ярман һуғышы (Беренсе донъя һуғышы) ҡырҡа үҙгәртә. Оҙаҡламай уны әрмегә алалар. Белемле егет шунда уҡ кесе офицерҙар әҙерләү хәрби мәктәбенә уҡырға

ебәрелә. Хәрби курстарҙы үтеү менән Әүхәҙей прапорщик чинында фронтҡа китә. 1914 йылдан алып 1917 йылға тиклем, дүрт йыл буйы Ярман һуғышында йөрөй. Ҡавалерияла хеҙмәт итә. Һуғышта йәш прапорщик үҙен һынатмай, ҡыйыу командир итеп таныта. Яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул дүрт тапҡыр Георгий тәреһе менән бүләкләнә, йәғни тулы кавалеры булып китә. Оҙаҡламай подпоручик дәрәжәһе ала (хәҙергесә лейтенант званиеһы).

1917 йылғы Февраль революцияһы һөҙөмтәһендә батша власы ҡолатылғас, армияға иркенлек менән бергә тарҡаулыҡ та килә. Утты-һыуҙы үткән офицер тыуған яғына ҡайтып төшкәндә, Башҡортостанда милли мөхтәриәт өсөн хәрәкәт киң ҡолас алған мәл була. Әүхәҙей Ишмырҙин башы-аяғы менән автономия яулау көрәшенә сума. Башҡорт ҡоролтайҙарының эшендә ҡатнаша, Ырымбурҙа урынлашҡан Башҡорт мәркәз шураһы менән тығыҙ бәйләнештә тора. 1917 йылда ойошторолған тәүге башҡорт баҫмаһы, милли хәрәкәттең матбуғат органы “Башҡорт” гәзитенә мәҡәләләр яҙа. 1917 йылдың декабрендә 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһы раҫланып, тәүге милли хөкүмәт булдырыла. Автономияны тәүҙә Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә тормошҡа ашырырға тигән ҡарар ҡылына. Мөхтәриәт территорияһы 13 кантонға бүленә. Стәрлетамаҡ өйәҙендә, юрматы башҡорттары ерҙәрендә Юрматы кантоны ойошторола. Был эштә Әүхәҙей Ишмырҙин да әүҙем ҡатнаша. Айбарлы егет урындағы милли хәрәкәт лидерҙарының береһенә әүерелә.

Әммә Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыусылар ҙа аҙ булмай. Тәү сиратта, Урал-Иҙел штаты булдырыу идеяһы менән йөрөгән татарҙар ҙур ҡаршылыҡ күрһәтә башлай. Бынан тыш большевиктар, тәү сиратта татар большевиктары, башҡорт мөхтәриәтенә теше-тырнағы менән ҡаршы була. 1918 йылдың ғинуарында Ырымбур большевиктар ҡулына күскәс, күп тә үтмәй, февраль башында Башҡорт хөкүмәте улар тарафынан ҡулға алына.

Бөтөн Башҡортостан халҡы был эшкә ризаһыҙлыҡ белдерә, Ырымбурға төрлө төбәктәрҙән телеграммалар яуа. Юрматы кантоны башҡорттары Әүхәҙей Ишмырҙин менән Гәрәй Ҡарамышевты Ырымбур ҡалаһына ебәрә. Әммә улар Башҡорт хөкүмәте ағзаларына ярҙам итә алмай, кире ҡайталар. Ҡайтҡас, Ишмырҙин Юрматы кантоны башҡорттары ҡоролтайын йыйып, Совет хөкүмәте рәйесе В.И.Ленинға былай тип телеграмма ебәрә: “Кантональный съезд 250 представителей от 24 волостей Стерлитамакского уезда, обсудив арест членов Башкирского парламента в Оренбурге, постановил: заявляем категорический протест против такой несправедливости. Обвинения ни на чем не основаны, кроме нелепых слухов. Их оклеветали, сводя личные счеты. Быть контрреволюционерами они не могли. Платформа Башкурдистана [совету] народных комиссаров известна по докладу комиссара Манатова. Заявляя протест, требуем немедленного освобождения и передачи их в распоряжение представителей от кантонов Башкурдистана, которые съезжаются в Оренбург и которые, если найдут их виновными, предадут народному революционному суду”. Әммә башҡорт эшмәкәрҙәренең мөрәжәғәтенә Мәскәүҙә ҡолаҡ һалыусы булмай.

1918 йылдың 4 апрель башында Әмир Ҡарамышевтың партизан отрядтары казактар менән бергә Ырымбурға һөжүм ойоштороп, Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән азат итеүгә өлгәшә. Май аҙағында Чехословак корпусы баш күтәргәс, Урал-Иҙел төбәгендә большевиктар власы юҡҡа сыға. Илдә аҡтар менән ҡыҙылдар араһында һуғыш башлана.

Июнь башында хөкүмәт ағзалары Силәбе ҡалаһына йыйылып, үҙҙәренең эшмәкәрлеген яңынан йәйелдереп ебәрә. Ҡомуч (Ҡомитет членов Всероссийского учредительного собрания, Һамар хөкүмәте) һәм Себер хөкүмәттәре ярҙамында башҡорттар ғәскәр ойоштора башлай.

Был осорҙа Әүхәҙей Ишмырҙин Стәрлетамаҡ ҡалаһында Ҡомуч армияһына хеҙмәткә алына. Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттарынан мосолман ротаһы ойоштороп, ҡыҙылдарға ҡаршы йөрөй. Ләкин тиҙҙән Башҡорт хәрби шураһы рәйесе, яҡташы Зәки Вәлидиҙең ходатайствоһы аша башҡорт офицерҙары башҡорт армияһына күсерелә башлай. Шул иҫәптән, подпоручик Әүхәҙей Ишмырҙин ҡустыһы Сөләймән менән бергә Ырымбурға саҡыртып алына.

1918 йылдың йәйендә Башҡортостан территорияһы ҡыҙыл гвардия отрядтарынан азат ителгәс, урындағы власть органдарының эшмәкәрлеген ҡайтанан тергеҙеү, юлға һалыу эше көн үҙәгенә сыға. Илдә һуғыш барған осорҙа урындарҙа тәүәккәл, хәрби тәжрибәһе булған етәкселәр талап ителә. Шуға күрә лә Башҡорт хөкүмәте Әүхәҙей Ишмырҙинды Юрматы кантоны башҡармаһы рәйесе, кантон етәксеһе итеп тәғәйенләй. Әммә уға был вазифала оҙаҡ эшләргә тура килмәй. Сөнки ишәйә барған башҡорт ғәскәрҙәренә лә утты-һыуҙы үткән, тәжрибәле офицерҙар кәрәк була. Сентябрь аҙағында Әүхәҙей Ишмырҙинды Ырымбурға Башҡорт хәрби шураһы (Башҡорт ғәскәре штабы) ҡарамағына саҡыртып алалар. Хәҙер ул хәрби шура рәйесе Зәки Вәлидиҙең өлкән адъютанты вазифаһын башҡара. 1918 йылдың 2 октябрендә Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән Ишмырҙин 6-сы полк командиры итеп тәғәйенләнә, йәғни уға ошо ғәскәрҙе ойоштороу эше йөкмәтелә. Был юҡҡа ғына түгел, сөнки 6-сы Башҡорт полкы Стәрлетамаҡ өйәҙе, йәғни Юрматы кантоны башҡорттарынан туплана. Әүхәҙей Ишмырҙин 6-сы полк менән 1919 йылдың ғинуарына тиклем командалыҡ итә. Подпоручик дәрәжәһенән поручикка, һуңынан штабс-капитанға күтәрелә (хәҙергесә капитан званиеһы). Ул етәкселек

*Әүхәҙей Ишмырҙинды 6-сы Башҡорт пехота полкы командиры, ә Сөләймән Ишмырҙинды Юрматы отряды начальнигы итеп тәғәйенләү тураһында Башҡорт хәрби шураһының фарманы. 1918 йыл, 2 октябрь*



65

Копія.

16

# Приказъ

БАШКИРСКАГО ВОЕННАГО СОВѢТА

(Штабъ Башкирскаго войска)

№ 55.

2 октября 1918 года гор. Оренбургъ

Отдѣлъ строевой.

§ 1.

Подполковника Я н и ш е в с к а г о назначаю и. д. завѣдывающаго мобилизаціоннымъ отдѣломъ Башкирскаго Военнаго Совѣта, а и. д. завѣдывающаго этимъ отдѣломъ прапорщика Т е р е г у л о в а назначаю помощникомъ завѣдывающаго этимъ отдѣломъ—обоихъ съ 1 октября с. г.

§ 2.

Подпоручика И ш м у р з и н а назначаю командиромъ 6 Башкирскаго пѣхотнаго полка съ 1 октября сего года.

§ 3.

Чиновникъ военнаго времени Хабибулла К а р и м о в ъ назначается вр. и. об. начальника хозяйственной части 6 пѣхотнаго Башкирскаго полка съ 1 октября сего года.

§ 4.

Прапорщикъ Ибрагимъ Ч а л ы ш е в ъ назначается въ 6 пѣхотный Башкирскій полкъ въ распоряженіе командира названнаго полка.

§ 5.

Подпоручикъ У з б е к о в ъ назначается начальникомъ Табынскаго добровольческаго отряда съ 1 сего октября.

§ 6.

Прапорщикъ У р м а н ц е в ъ назначается помощникомъ воинскаго начальника Табынскаго кантона съ 1 сего октября.

§ 7.

Подпоручикъ И ш м у р з и н ъ назначается начальникомъ Юрматинскаго добровольческаго отряда съ 1 октября с. г.

иткән полк Башҡорт хөкүмәтенең ныҡлы терәге була. Башҡа башҡорт полктарынан айырмалы рәүештә, 6-сы Башҡорт полкы, аҡтарға буйһонмай, Башҡорт хөкүмәте ҡарамағында ҡала.

1918 ноябрендә власты үҙ ҡулына алған адмирал Ҡолчак Башҡорт корпусын тарҡатыуға өлгәшә. Артабан башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура атаман Дутовҡа буйһондоророға бойора. 1-се, 2-се, 4-се һәм 5-се Башҡорт уҡсы полктары Дутов фарманы менән Аҡтүбә фронтына ебәрелә, әммә ноябрь аҙағында Башҡорт хөкүмәте бойороғо менән улар кире Ырымбурға ҡайта.

Декабрь айында Зәки Вәлиди Башҡорт ғәскәренең бөтөн полктарын бер урынға тупларға тигән йәшерен фарман ебәрә. Һөҙөмтәлә ғинуар башында, 3-сө полктан тыш, башҡорт полктары Башҡортостан территорияһында бер йоҙроҡҡа туплана. Вәлиди Башҡорт корпусын ҡайтанан тергеҙә. Полктарҙы ике дивизиянан торған яңы корпусҡа берләштерә һәм ғәскәрҙәр менән етәкселекте туранан-тура үҙ ҡулына ала. Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы Зәки Вәлидиҙең 1919 йылдың 26 ғинуарындағы фарманында былай тиелә:

“Из Башкирских частей формируется 1-й Башкирский корпус 2-х дивизионного состава.

В состав 1-й дивизии входят три пехотных полка (а именно 1-й, 2-й и 3-й полки) и один кавалерийский (а именно 1-й кавалерийский полк).

В состав 2-й дивизии входят три пехотных полка (а именно 4-й, 5-й и 6-й полки) и один кавалерийский полк (а именно 2-й кавалерийский полк).

Временно до прибытия 3-го полка:

1-й дивизии — 1-й пехотный полк, 2-й пехотный полк, 4-й пехотный полк и 2-й кавалерийский полк.

2-й дивизии — 5-й пехотный полк, 6-й пехотный полк и 1-й кавалерийский полк”.

1-се Башҡорт дивизияһы менән командалыҡ итеүҙе Вәлиди үҙенең тоғро көрәштәше Әүхәҙей Ишмырҙинға йөкмәтә. Ҡолчак яғында автономия алыуға өмөтөн өҙгән Башҡорт хөкүмәте большевиктар менән килешеү юлын эҙләй. Аҡтар яғында сәйәси йәһәттән Башҡорт хөкүмәтенә яҡын торған элекке Ҡомуч (Ҡолчак уларҙы тарата) ағзалары ла быны хуплай. 1919 йылдың 30 ғинуарында Өфөлә башҡорт вәкиле большевиктар менән бәйләнешкә инә. Күп тә үтмәй Мәскәүҙән Ленин менән Сталин Башҡортостан автономияһын танырға риза булыуын белдереп телеграмма һуға.

Һөҙөмтәлә 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сығырға тигән фекергә килә. Зәки Вәлиди тарафынан штабс-капитан Ишмырҙинға тағы ла ҙур бурыс һалына — Башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын тәьмин итеү. 1919 йылдың 18 февралендә Әүхәҙей Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се дивизия полктары беренсе булып Ҡыҙыл Армия яғына сыға. Ғәскәрҙе кисәге дошман яғына алып сығыу еңелдән булмай. Шуға был эш абруйлы, тәжрибәле командир Әүхәҙей Ишмырҙин иңенә һалына. Сардар үҙенә йөкмәтелгән бурысты теүәл үтәй, ҡыҙылдар позицияһына беренсе булып үҙе килә. 18—20 февралдә башҡорт полктары ҡыҙылдар яғына сығып бөтә.

21 февралдә Темәс ауылында 1-се Бөтә Башҡорт хәрби съезы йыйыла. Унда һәр полктан делегаттар ҡатнаша. Съезд Башҡорт хөкүмәтенең советтар яғына сығыу ҡарарын раҫлай. Әүхәҙей Ишмырҙин милли хәрәкәт етәкселәре



*Башҡорт ғәскәрҙәре командирҙары Саранский ҡалаһында. Алғы рәттә һулдан 3-сө С.Ишмырҙин, артҡы рәттә һулдан 2-се Ә.Ишмырҙин тора. 1919 йыл*

Зәки Вәлиди, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов һәм башҡалар менән бергә Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте — Башревком ағзаһы итеп һайлана. Республиканың хәрби комиссары итеп Зәки Вәлиди һайлана, уның урынбаҫары вазифаһы Әүхәҙей Ишмырҙинға йөкмәтелә.

Ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң башҡорт етәкселәре алдында ифрат ауыр һәм ҙур эш тора: Башҡортостан совет республикаһын һәм уның ҡоралллы көстәрен ойоштороу. Зәки Вәлидигә мөһим дәүләт эштәре һәм хәрби эштәр буйынса күп йөрөргә тура килә. 1919 йылдың тәүге яртыһында Вәлиди командировкаларҙан ҡайтып инмәй тиерлек. Ошо сәбәпле башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эше менән туранан-тура уның урынбаҫары Әүхәҙей Ишмырҙинға шөғөлләнергә, Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһын башҡарырға тура килә. Мәҫәлән, Вәлиди 1919 йылдың мартында Мәскәүгә китеп, килешеү буйынса һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашып йөрөй. Был эш тик апрель башында ғына тамамлана. Вәлидиҙе ошо осорҙа рәсми рәүештә Башҡортостандың хәрби комиссары һәм башҡорт армияһы командующийы итеп раҫлайҙар.

Башревком март аҙағынан юлда була, апрель аҙағына Саранский ҡалаһына эвакуациялана. Вәлиди Һамар ҡалаһында Башревкомға килеп ҡушыла ла, хәрби комиссариат буйынса фармандар биреп, 27 апрелдә тағы командировкаға сығып китә. Ул башҡорт ғәскәрҙәрен тиҙерәк Башҡортостанға ҡайтарыу мәсьәләһе менән йөрөй. Үҙенең урынына тағы ла Әүхәҙей Ишмырҙинды ҡалдыра. Вәлиди 13 майҙа ҡайта ла, ун көн тормай, 21 майҙа Һамар ҡалаһына, Фрунзе янына китә. 27 май Һамарҙан ҡайтып, иртәгеһенә Мәскәүгә китә. 18 июнь Мәскәүҙән ҡайтып, 25 июнь Украинаға, Көньяҡ фронтҡа, башҡорт полктары янына юлға сыға. Көньяҡ фронттан 15 июлдә ҡайта ла, иртәгеһенә Һамар һәм Бәләбәй ҡалаһына

юллана. Бәләбәйҙә ойошторолған башҡорт ғәскәрен ҡарай. Һамарҙан 15 августа ҡайта. Тимәк, март, апрель айҙарында, 27 апрелдән 13 майға, 21—27 майҙа, 28 майҙан алып 18 июнгә, 25 июндән 15 июлгә, 16 июлдән 15 августа тиклем Әүхәҙей Ишмырҙин Зәки Вәлиди урынына Башҡорт Совет Республикаһының хәрби комиссары вазифаһын башҡара. Саранский ҡалаһында ике кавалерия һәм ике уҡсы полктарынан торған Айырым Башҡорт бригадаһын ойоштороп, Көньяҡ фронтҡа оҙатыу эшенә туранан-тура етәкселек итә. Артабан Бәләбәй ҡалаһында ойоштороло башлаған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы менән шөғөлләнә. 1919 йылдың 21 июлендә Һамар ҡалаһында Көнсығыш фронттағы Башревком вәкиле М.Халиҡовҡа: “Говорил с Белебеем, пока в бригаду поступило лишь 530 человек; мобилизация идет почему-то туго, приму самые решительные меры. Взял на себя обязанность мобилизации Белебеевского, Стерлитамакского уездов, закончу к 1 августа. Сам буду разъезжать по волостям и в Стерлитамак...” — тип хәбәр итә Әүхәҙей Ишмырҙин.

Бәләбәйгә килеп, бригаданы ойоштороу эшенә ныҡлап тотона. Бригада командиры Михович урынына башҡорт офицерын, элекке полковник Хәсән Әхмәровты тәғәйенләй. Бригада штабы начальнигы Воронцов урынына Заһит Гәрәевты — башҡорт офицерын ҡуя. 1919 йылдың сентябрь башына Ишмырҙиндың тырышлығы менән Бәләбәй ҡалаһында тағы бер башҡорт милли ғәскәре — өс полктан торған (4 мең тирәһе кеше) Айырым башҡорт уҡсы бригадаһы үҫеп сыға.

1919 йылдың сентябрендә Реввоенсовет рәйесе Троцкий башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә бойороҡ бирә. Тиҙ арала Бәләбәйҙән Айырым башҡорт уҡсы бригадаһы, 3-сө Башҡорт кавалерия полкы күсерелә. Көньяҡ фронттан Башҡорт кавалерия дивизияһы полктары килә. Деникинға ҡаршы һуғышта ауыр юғалтыуҙар кисергән, сафтары һирәгәйгән Башҡорт кавалерия дивизияһын тулыландырыу, һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү, башҡорт ғәскәрҙәрен Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа әҙерләү бурысы алғы планға сыға.

“Постановление Реввоенсовета Республики от 7 октября за № 4848-ОП о новом переформировании башкирских частей в Петрограде нами в исполнение еще не приведено. Для разрешения этого вопроса прошу срочно выехать в Петроград товарища Валидова или Ишмурзина...” — тип хәбәр итә башҡорт ғәскәрҙәре эштәре буйынса махсус вәкил Хәлим Әмиров. Оҙаҡламай Әүхәҙей Ишмырҙин Петроградҡа килеп, Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө частарын ойоштороу, тулыландырыу менән туранан-тура шөғөлләнә.

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградты һаҡлауҙа әүҙем ҡатнаша. Бының өсөн ҡала гарнизонында торған Башҡорт кавалерия дивизияһынан һәм Башҡорт уҡсы бригадаһынан берәр полк бүленеп, Петроград фронтында Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө булдырыла. Был төркөмгә шулай уҡ Башҡорт артиллерия дивизионы беркетелә. Совет хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәренең Юденич армияһын ҡыйратыуҙа күрһәткән батырлыҡтарын юғары баһалай. Башҡорт командирҙарына һәм һалдаттарына Ҡыҙыл Байраҡ ордендары һәм ҡиммәтле бүләктәр бирелә. Шул иҫәптән, Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғабдулла Ибраһимовҡа Ҡыҙыл Байраҡ ордены, Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһировҡа ҡиммәтле эйәр тапшырыла. РСФСР хөкүмәте Әүхәҙей Ишмырҙиндың хеҙмәттәрен дә баһалап үтә. Уға алтын хәрефтәр менән яҙылған исемле ҡылыс бүләк итәләр.

Башҡортостанға ҡайтыу менән Ишмырҙин республиканың запас ғәскәри частарын ойоштороу эшенә тотона. Стәрлетамаҡта торған ғәскәрҙәр туранан-тура уға буйһона, ул үҙе гарнизон начальнигы вазифаһын үтәй. Ул саҡта Башревком урынлашҡан Стәрлетамаҡ ҡалаһы Өфө губернаһы ҡарамағында була.

Өфө һәм Ырымбур губернаһы большевиктары Башҡортостан автономияһына ҙур ҡаршылыҡ күрһәтә, төрлө провокациялар ойоштора. Ләкин улар Башҡорт республикаһының хәрби көстәренән шөрләнкерәйҙәр. 1919 йылдың сентябрендә булып үткән ваҡиғалар шул турала һөйләй. Сентябрь айында Көньяҡ фронттан, 1-се Башҡорт кавалерия полкынан делегат сифатында Зәйнуллин тигән һалдат Стәрлетамаҡҡа килә. Ул Деникинға ҡаршы һуғыштарҙағы батырлыҡтары өсөн Троцкийҙан бүләккә сәғәт алған ҡаһарман яугир, абруйлы һалдат була. Стәрлетамаҡ өйәҙе ЧК-һы өс башҡорт һалдатын, шул иҫәптән Зәйнуллинды контрреволюцияла ғәйепләй, төрмәгә ябып ҡуя. Большевиктарҙың бындай башбаштаҡлығы, үҙҙәрен Стәрлетамаҡта хужа кеүек тотоуҙары Башҡорт республикаһын иҫәпкә алмауҙарын асыҡ күрһәтә. Әүхәҙей Ишмырҙин большевиктарға башҡорттарҙың кем икәнен тиҙ төшөндөрә: уның бойороғо буйынса башҡорт һалдаттары 26 сентябрҙә Стәрлетамаҡ төрмәһенән барып баҫып, тотҡондарҙы азат итә.

Был ваҡиға тураһында Өфө губревкомы рәйесе Эльцин Мәскәүгә бына нимә тип ошаҡлай: “Только что прибыл нарочный из Стерлитамака с сообщением следующих фактов, подтвержденных документально: 26 сентября начальник гарнизона Башвоенкомата по Стерлитамаку Ишмурзин Первый командировал для Бисярова в Стерлитамакскую тюрьму с вооруженной силой 70 человек для освобождения арестованных, числящихся за Стерлитамакской Чека, Зайнуллина, Даутова, Надыршина, предписав в случае сопротивления агентов Чека арестовать их. Освобожденные обвиняются в контрреволюции, состоят сотрудниками Башвоенкомата. В ответ на эти незаконные действия в тот же день уполномоченным ревсовета укрепрайона Сидоровым был запрошен начальник гарнизона, им и предревкомом уезда Тереховым был запрошен политотдел Башреспублики с предупреждением ликвидировать незаконные действия. Ответа на запрос еще не последовало. Прибывший нарочный сообщает, что против отряда Чека выставлены пулеметы численностью одиннадцать. Башкирские части приведены в боевую готовность. По данным разведки, их численность в одном Стерлитамаке до четырех тысяч чел., вооруженных вполне. Нарочным сообщено уревкому. Наши указания — держаться тактично, не открывая активных действий, сообщая о незаконных действиях в губернский центр...”

Бына ошондай ҡатмарлы, ауыр осорҙа Әүхәҙей Ишмырҙин кәрәк урында көс менән Башҡорт автономияһының хоҡуҡтарын большевиктарға таныта, Башревком менән иҫәпләшергә мәжбүр итә. “Әүхәҙей Ишмырҙин, үҙенең уйнап торған толпарына атланып, йәнһаҡсылары оҙатыуында Стәрлетамаҡтың үҙәк урамдарына килеп сыҡһа, бөтә хәрәкәт туҡталыр, атлылар ҙа, йәйәүлеләр ҙә юл бирер һәм: “Башҡортостандың хәрби комиссары Ишмырҙин килә!” — тип һоҡланып ҡалыр ине”, — тип яҙа Сулпан Иманғолов үҙенең атаһы Ғоссаметдиндән ишеткән хәтирәләрҙә.

Ләкин артабанғы айҙарҙа Башревкомға ҡаршы көрәшкә Мәскәүҙән Үҙәк власть эмиссарҙары, Башобком ҡушыла. 1920 йылдың ғинуарында Башобком менән Башревком араһында низағ башлана. Обком БашЧК-ны үҙенә буйһондорорға тырыша, уның рәйесен алмаштыра. Ошо уҡ мәлдә БашЧК тарафынан Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы фетнә ойошторолоуы тираһында хәбәр

килеп етә. Башревком рәйесе Харис Йомағолов фетнәселәрҙе ҡулға алырға бойора, БашЧК-ның яңы етәкселеге һаҡ аҫтына алына. Ике яҡ араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡта Мәскәү коммунистарҙы яҡлап сыға. Йомағолов Мәскәүгә саҡыртып алына, башҡа ҡайтарылмай. Башревкомға етәкселек эшен Вәлиди үҙ ҡулына ала, әммә Башҡорт автономияһының хоҡуҡтарын сикләргә йыйынған Мәскәү уны ла март айында саҡыртып ала һәм башҡа ҡайтармай. Шулай итеп, Әүхәҙей Ишмырҙин 1920 йылдың март айынан ғәмәлдә Башҡортостандың хәрби комиссары булып китә. Үҙенә ярҙамсы итеп көрәштәше, Петроград фронтынан ҡайтҡан офицер Ибраһим Исхаҡовты ала.

Әммә 1920 йылдың 17 майында РСФСР СНК-һы һәм ВЦИК декреты менән Башҡорт автономияһының хоҡуҡтары ҡырҡа сикләнә. Башҡорт хәрби комиссариаты элек туранан-тура үҙәккә буйһонған булһа, хәҙер Волга аръяғы хәрби округы ҡарамағына тапшырыла.

Зәки Вәлиди кәңәше буйынса, Мәскәүҙең был ҡылығына протест белдереп, Башревком ағзалары эштәрен ташлап, Башҡортостандан сығып китә. Хәрби комиссариаттың ҡарауыл командаһы Әүхәҙей Ишмырҙин менән Бөрйән-Түңгәүер кантонына китә. 1920 йылдың 30 июнендә П.Викман Мәскәүгә: “Район национальной столицы Башкирии кишит вооруженными шайками. Вдобавок, к Темясово продвинуты приказом наркомвоена Ишмурзина отряды кавалерии и пехоты”, — тип хәбәр итә.

Бөрйән-Түңгәүер кантонында кәңәшмә үткәргәндән һуң, башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән Әүхәҙей Ишмырҙин, көрәште дауам итеү өсөн Төркөстанға сығып китә. “Беҙҙең Башҡортостан ғәскәренән Әүхәҙей Ишмырҙин, ярҙамсым Ибраһим Исхаҡов, башҡа бер нисә офицерыбыҙ, полковник Һибәтулла Һөйөндөковтың яҡын офицерҙары менән бергә килеп, барыһы ла Бохараның хәрби ойошмаларында етәксе вазифалар алды”, — тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Төркөстанда Зәки Вәлиди һәм башҡа башҡорт эшмәкәрҙәре тарҡау баҫмасы отрядтарын бергә туплап, большевиктарға ҡаршы ойошҡан рәүештә көрәшергә ниәт итә. Төрлө фронттарҙа һуғышып, утты-һыуҙы күп кискән башҡорт офицерҙары баҫмасыларҙы һуғышҡа өйрәтеү, ойоштороу эше менән мәшғүл була. Әүхәҙей Ишмырҙин Төркөстанда ҡыҙылдарға ҡаршы күп кенә һуғыштарҙа ҡатнаша. Милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Вәлиди һәм уның көрәштәштәре, шул иҫәптән Әүхәҙей Ишмырҙин Афғанстанға китергә кәңәшләшәләр. Әммә ҡаһарман сардар һәләкәткә осрай. “Ташкентта саҡта хөкүмәт даирәләрендә эшләгән арҡадаштарыбыҙ аша беҙҙе бик ауыр ҡайғыға һалған тағы бер ваҡиғаны белдек. Был иһә дуҫым Әүхәҙейҙең ҡыҙылдар ҡулына әсир төшөүе ине. Ул ваҡиға хаҡында башҡа яҡтан бер ниндәй ҙә мәғлүмәт алмаһаҡ та, ысын булыуына ышандыҡ. Бер йылдан һуң Ҡабулда саҡта Әүхәҙейҙе Мәскәүҙә язалауҙарын ишеттек, ләкин эштең асылын, 1925 йылда Төркиәгә килгәс, йәғни өс йыл үткәндән һуң ғына, Әүхәҙей янында булған арҡадаштарынан белдек.

Әүхәҙей һәм яҡындары, 11 августа Усматта хушлашып, минән айырылғандан һуң Мамур һәм Тураб бәктәр менән бергә Зомин һәм Уратүбә тауҙарында ҡыҙылдар менән һуғыша-һуғыша бер аҙна ваҡыт үткәргәндәр. Арҡадашы Һибәтулла әйтеүенсә, Әүхәҙей Зомин тимер юлы станцияһынан ун саҡырым төньяҡтағы Куру Гөлдөрәүек исемле йәйләүҙә урыҫтар менән бәрелештә әсир төшкән. Был көндәрҙә Әүхәҙейҙең рухы бик төшөнкө була. Шул уҡ Һибәтулланың хәбәренә ҡарағанда, бер кистә йәйләү аласығында ултырғандар, көн бик ямғырлы,

томанлы булған. Эйәр муҡсаһындағы коньякты алып килеп арҡадаштары менән эскән саҡта Әүхәҙей Пушкиндың ошо шиғырын һөйләгән:

Буря мглою небо кроет,
Вихри снежные крутя...
Наша ветхая лачужка
И печальна, и темна...

Выпьем с горя, где же кружка,
Сердцу будет веселей.

Ул үҙе был тауҙарҙа оҙаҡ ҡалмай, Мача юлы менән Әнүәр Паша янына китергә, унда ла туҡталмай, Афғанстанға сығырға уйлаған икән. Мачаларҙың рәйесе Асрархан ғәскәре менән бергә килгән. Әүхәҙей был һуғышта ла күп егетлек күрһәткән, ләкин рустарҙың тап ҡаршыһына сыҡҡан бер урында аты ташҡа һөрөнөп йығылған һәм шунда уҡ янына ҡыҙыл һалдаттар ҙа килеп еткән. Әүхәҙей уларҙың бер нисәһен атып үлтергән, әммә әсиргә эләккән. Шулай итеп, беҙҙең Башҡортостандың хөрмәтле хәрби нәзире әсир төшөп, туҡмала-туҡмала, Зоминға, унан Ташкентҡа, артабан Мәскәүгә алып кителә”.

Башҡортостан дәүләтселегe өсөн хәрәкәттә әүҙем ҡатнашҡан ҡаһарман башҡорт офицеры, милли хәрәкәт етәкселәренең береһе булған Әүхәҙей Ғәләүетдин улы Ишмырҙиндың ғүмере ошо рәүешле өҙөлә. Уның Исхаҡ улын ҡустыһы Сөләймән Ишмырҙин ҡарай, һуңынан уның менән бергә Мәскәүгә китеп, шунда белем алып, ғүмере буйы баш ҡалала йәшәй. 30-сы йылдарҙа Ҡинйәбулат ауылына килеп йөрөй. Бер килгәнендә атаһының исемле ҡылысын алып ҡайтып китә. Сулпан Иманғолов “Әүхәҙей ҡылысы” мәҡәләһендә (“Шоңҡар”, 1995 йыл, №2) был ҡылыс Мәскәүҙә, Әүхәҙей Ишмырҙиндың ейәне Бористың ғаиләһендә һаҡлана, тип яҙған. Минеңсә, был тарихи ҡомартҡының урыны Башҡортостандың милли музейында булырға тейеш. Мәҙәниәт министрлығы хәстәрлеге менән был ҡылысты Башҡортостанға ҡайтарыу шарт.

* * *

*Сөләймән Ишмырҙин*



Әүхәҙей Ишмырҙиндың бер туған ҡустыһы Сөләймән атлы ир-азаматтың да Башҡортостан мөхтәриәте өсөн көрәштә күрһәткән фиҙакәр хеҙмәте ҙур. Ул 1918—1919 йылдарҙа башҡорт һалдаттарының ихтирамын яулаған, абруйлы сардар булып таныла.

Сөләймән Ишмырҙин 1893 йылдың 5 июнендә Ҡинйәбулат ауылында, Ғәләүетдин Ишмырҙиндың ғаиләһендә өсөнсө ул булып донъяға килә. Ағаһы Әүхәҙей кеүек үк белем һуҡмағын тапай. 1905 йылда Ергән ауылындағы 2 синыфлы урыҫ-башҡорт мәктәбен тамамлай. Артабан уҡыуын Ҡазан ҡалаһындағы уҡытыусылар семинарияһында дауам итә. 1913 йылда семинарияны тамамлап, бер йыл мөғәллимлек итә.

1914 йылда башланған дәһшәтле һуғыш Сөләймәндең дә яҙмышын ҡырҡа үҙгәртә. Октябрь айында уны хәрби хеҙмәткә алалар. Һамар ҡалаһында торған 28-се сапер батальонында хеҙмәт итә. 1915 йылдың 31 мартында батальон менән һуғышҡа китә. Ике йыл тирәһе Сөләймән Ишмырҙин Көньяҡ-Көнбайыш фронтта йөрөй.

1917 йылдың 1 ғинуарында белемле егетте Көньяҡ-Көнбайыш фронттың Житомир ҡалаһындағы 1-се прапорщиктар мәктәбенә ебәрәләр. Ярты йыл уҡығандан һуң, 1917 йылдың 15 июнендә С.Ишмырҙин прапорщик чинында 283-сө запас пехота полкына тәғәйенләнә. Бында ул полктың 3-сө ротаһы командиры булып хеҙмәт итә, полк суды рәйесе вазифаларын үтәй. Подпоручик дәрәжәһенә үҫә. 1918 йылдың апрелендә демобилизацияланғас, Стәрлетамаҡ өйәҙ ревтрибуналы ағзаһы булып тора.

1918 йылдың июнендә Башҡортостан территорияһы большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күскәс, подпоручик Сөләймән Ишмырҙин Стәрлетамаҡ өйәҙендәге бер төркөм фронтовик башҡорт офицерҙары Шаһибәк Үзбәков, Ибраһим Исхаҡов, Ғәбделбарый Ғәмбәровтар менән бергә Өфөгә, Халыҡ армияһына хеҙмәткә саҡырыла. Тиҙҙән уларҙы Ырымбурҙағы Башҡорт хәрби шураһының юллауы буйынса Башҡорт армияһы сафына күсерәләр.

1918 йылдың 1 октябрендә Сөләймән Ишмырҙин ағаһы Әүхәҙейҙең урынына Юрматы кантоны рәйесе итеп тәғәйенләнә, бер үк ваҡытта Юрматы отрядын етәкләй. Бер ай тирәһе эшләгәндән һуң, уны Зәки Вәлиди 1-се Башҡорт полкы командиры итеп тәғәйенләй. Был осорҙа Колчак власҡа килеү менән хәлдәр ҡатмарлаша. Колчак башҡорт полктарын Дутовҡа буйһондорорға фарман бирә. Шуға күрә Башҡорт хөкүмәте полктарға үҙ офицерҙарын ҡуйырға тырыша. Сөләймән Ишмырҙин подполковник Якубовский урынына 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп тәғәйенләнә.

1918 йылдың көҙөнән 1919 йылдың февраленә тиклем Сөләймән Ишмырҙин 1-се Башҡорт уҡсы полкы менән ҡыҙылдарға ҡаршы, тәүҙә Аҡтүбә фронтында, һуңынан Стәрлетамаҡ йүнәлешендә һуғышып йөрөй. Уға поручик, шунан штабс-капитан званиеһы бирелә. Әйткәндәй, 1926 йылда, Зәки Вәлидигә "буржуаз милләтсе" мөһөрө тағылып, элекке милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре үҙҙәренең аҡтар яғындағы хеҙмәтен биографияла күрһәтмәҫкә тырышҡан ваҡытта, Сөләймән Ишмырҙин үҙенең анкетаһында йәшермәйенсә "Состоял командиром полка в Национальной Башкирской армии, боровшейся в целях завоевания Автономии", — тип яҙып ҡуйған. Ниндәй ҡыйыулыҡ өлгөһө күрһәткән ир-уҙаман!

Зәки Вәлидиҙең йәшерен фарманы буйынса Дутов ҡарамағында Аҡтүбә фронтында торған 1-се, 2-се, 4-се һәм 5-се Башҡорт уҡсы полктары (улар Дутов армияһында 9-сы Башҡорт дивизияһы булып йөрөй) Башҡортостанда туплана. Сөләймән Ишмырҙиндың 1-се полкы ағаһы Әүхәҙей етәкселек иткән 1-се Башҡорт дивизияһы составына инә. 1919 йылдың 18 февралендә ошо дивизия сафында совет власы яғына сыға. Әммә Ҡыҙыл Армия уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алмай, ә киреһенсә, Үҙәк Совет власының бойороғона ҡарамайынса, башҡорттарҙан үс ала башлай. Башҡорт полктарын тылға күсереп (Мәләүез, Стәрлетамаҡ янына), ҡоралһыҙландыралар, ылауҙарын һәм башҡа кәрәк-яраҡтарын тартып алалар. Һалдаттарҙың күптәрен өйҙәренә ҡайтарып ебәрәләр. Шулай итеп, 1-се армия командующийы Гай фарманы менән башҡорт ғәскәрҙәрен тараталар. Был хәл 1-се полктың да башына төшә. 1919 йылдың

3 мартында Сөләймән Ишмырҙин Темәс ауылындағы Башревкомға полктың хәле тураһында былай тип хәбәр итә: “Сообщаю, что с полком прибыл в село Мелеуз, где жду распоряжения от начдива Первой Пензенской. Все имущество полка: обмундирование, обозы, мастерская и оркестр — отобрал 1-й Смоленский полк. Мало того, дорогой у солдат и командного состава были отобраны собственные вещи. Приходилось терпеть оскорбления от красноармейцев и местных жителей. Считают нас все, и даже штаб Первой армии, пленными. Полное недоумение, разочарование. Как быть нам? От ревкома нашего никаких распоряжений не получаем. По приказу начдива Первой Пензенской солдат мы должны распустить, оставив только добровольцев. Командный состав переходит в резерв чинов Первой армии. Солдаты требуют, чтобы полк 1-й существовал и их считали не добровольцами, а мобилизованными (ибо они мобилизованы), и сожалеют, что отступили с фронта в тыл, а не остались на фронте для активной борбы с казаками. Посылаю для выяснения настоящего нашего положения двух ротных делегатов. Жду распоряжений”.

Әммә был мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре менән Башревком түгел, ә 1-се армия идара итә. Мәскәүҙән башҡорттарҙы тарҡатмаҫҡа тигән бойороҡ алыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙылдар Башҡорт корпусын тулыһынса ҡоралһыҙландырып, таратырға, тигән маҡсатта эш итә. Ике ай эсендә 6 полктан торған тулы бер корпус тарҡатыла. Ҡыҙылдарҙың башбаштаҡлығына түҙә алмай, Сөләймән Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се полктың 2-се батальоны киренән аҡтар яғына сыға. Шулай уҡ 2-се Башҡорт кавалерия полкының 3-сө эскадроны, һуңыраҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы аҡтар яғына китә.

1919 йылдың май аҙағында Саранский ҡалаһында Башҡорт корпусынан ҡалған ғәскәрҙәрҙән 1-се, 2-се уҡсы һәм 1-се, 2-се кавалерия полктары ойошторола башлай. Улар Айырым Башҡорт бригадаһын тәшкил итергә тейеш була. Сөләймән Ишмырҙин яңынан ойошторола башлаған 1-се Башҡорт уҡсы полкының командиры итеп тәғәйенләнә. Июнь башында Троцкийҙан тупланып та бөтмәгән башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрергә тигән фарман килә.

Был фарман килгәс, Зәки Вәлиди Ҡыҙыл Армия баш командующийы Вацетисҡа ошо турала аңлатып, былай тип яҙа: “Посылаете башкирские части на Южный фронт, но они еще не сформированы: на 2 стрелковых и 2 кавалерийских полка имеется только менее 100 лошадей, в 4-х полках со всеми хозяйственными командами, командным составом всего 3200, т.е. не больше 2000 штыков. На 4 полка всего 40 винтовок, винтовки только что получили из Бежецка, они еще до Саранска не дошли. Командного состава не хватает. Например, в 2-х кавалерийских полках всего 11 человек. Полагали формирование продолжать на фронте, где мобилизуются все освобожденные волости, люди и лошади, обозное имущество. Большую часть полученных обмундирований отправили в Южгруппу для вновь мобилизованных башкир (части Отдельной Башкирской стрелковой бригады. — ***Авт.***), которых мы в Саранск не отправляли ввиду близости нашего выступления. Теперь все дело формирования расстроится”.

4 июнь Башҡортостан хәрби комиссариаты Саранскийҙағы башҡорт полктарының ойошторолоу кимәле тураһында ҡыҫҡаса белешмә лә (таблица менән ҡуша) әҙерләй:

| Название частей | Число людей | | | Рота-эскадрон | Оружие | Лошади | Повозок | Примечание |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | Ком. | солдат | | | | | | |
| | | Бойцов | всего | | | | | |
| 1-й Стрелковый Башкирский полк | 32 | 305 | 419 | 3 | — | 52 | 1 | |
| 2-й Стрелковый Башкирский полк | 32 | 256 | 400 | 2 | — | 52 | 1 | Из них 39 в командировке за обмундир., снар., фуражом. |
| 1-й Кавалерийск. Башкирский полк | 17 | 229 | 311 | 2 | — | 46 | 1 | |
| 2-й Кавалерийск. Башкирский полк | 19 | 215 | 285 | 2 | — | 33 | — | Собственность красноармейцев-башкир. |
| Красный батальон (карауль.-конный) | 14 | — | 161 | 1 | 10 | 35 | — | Расформирован для формир. |
| В комплектовании находящихся в карантине | — | — | Около 800 | — | — | — | — | Карантин кончился 3 мая |
| Всего | 100 | 995 | 2215 | | | 183 | 3 | |

Таблицанан күренеүенсә, бригаданың дүрт полкы кеше һаны буйынса ике полкка ғына торошло булған. Фронтҡа сығырға торған ғәскәрҙең ҡоралдары ла бөтөнләй булмаған, ҡарауыл батальонындағы 10 винтовканы иҫәпкә алмағанда. Аттар, ылау тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. “По числу людей из всей бригады можно было бы составить пехотные полки — слабого состава, использовав весь командный состав, но опять и в этом случае отсутствие оружия, обоза и лошадей ставит преграду выдвижению на фронт полка”, — тигән һығымта яһай З.Вәлиди.

Әммә Вацетис, башҡорт полктары Харьковта гарнизон хеҙмәтен генә үтәйәсәк һәм шунда ойоштороу эштәрен тамамларҙар, тип Башҡортостан хәрби комиссариатын тынысландыра.

11 июндә Башҡорт бригадаһы полктары Саранскиҙан Көньяҡ фронтҡа, Харьков ҡалаһына юллана. Зәки Вәлиди Ленин, Троцкий һәм Сталинға: “Нахождение наших башкирских частей в Харькове, в распоряжении 14-й армии просим считать краткосрочной командировкой для выполнения специальных задач и просим скорее вернуть их на Восточный фронт”, — тип яҙа. Башҡортостан етәкселеге үҙ ғәскәрҙәренең Көньяҡ фронтта оҙаҡ булмауына һәм тиҙ арала ҡайтыуына ышанып, гарнизон хеҙмәтен генә үтәйәсәген иҫәпкә алып, Башҡорт бригадаһының штабын Саранскиҙа ҡалдыра. Бригаданың сәйәси комиссары Хәлим Әмиров ҡына особоуполномоченный сифатында башҡорт полктары менән Харьковҡа ебәрелә.

1919 йылдың 13 июнендә Харьковҡа килеп етеүгә, башҡорт ғәскәрҙәренә әҙерлекһеҙ, ҡоралһыҙ рәүештә Деникин армияһы менән ҡанлы һуғышҡа инергә тура килә. Полктарҙың, берҙән, командалығы ла булмай, сөнки штаб ойошторолоу кимәлендә була һәм ул Саранскиҙа тороп ҡала. Һуғыш шарттарында башҡорт полктарына тиҙ арала берҙәм идара органы — бригада шта-

бы булдырырға тура килә. Сөләймән Ишмырҙинды бригада командиры итеп һайлайҙар. Ике аҙна буйы Харьков янында барған ҡанлы яуҙарҙа Башҡорт бригадаһы ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Деникинсылар башҡорттарҙың ныҡлы ғәскәр икәнен күреп, уларҙы флангынан урап үтеп, ҡамауға алырға тырыша. Бригада күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында күп тапҡырҙар дошман ҡулсаһында тороп ҡала. Харьков ҡалаһы Оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында (башҡорт полктары уның идараһында була), Башҡорт бригадаһы байтаҡ юғалтыуҙар кисерә.

“Деникин частары, Башҡорт бригадаһының көслө ҡаршылығына осрауға ҡарамаҫтан, Харьков йүнәлешенә ҡарай һөжүмде туҡтатманылар. Дошман башҡорт полктарына туп-тура һөжүм итеүҙән тайпылып, беҙҙең частарҙы урап сығыу тактикаһына күсте.

Шуға ҡарамаҫтан, беҙ киң фронт һыҙығында дошмандың юлын быуып торҙоҡ. Даими рәүештә һөжүм итеп, кәрәк саҡта оборонала тороп, Харьков янында һуғыштыҡ. Дөйөм фронтта Ҡыҙыл Армия, дошмандың ҡыҫымына сыҙамай, бер нисә аҙна буйы Харьковҡа сигенде. Был мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре ысын мәғәнәһендә ғәжәйеп батырлыҡтар күрһәтте. Беҙҙең полктар дошманға бик ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеп сигенде. Сигенмәҫ ине, бөтөн Ҡыҙыл Армия сигенгәнгә күрә, Башҡорт дивизияһы ла Харьков яғына сигенергә мәжбүр булды. Армияның былай бер туҡтауһыҙ сигенеүе юғары командованиеның йүнһеҙлеге һәм аҡтарға һатылғанлығылыр, тигән уйҙа булды башҡорт ғәскәрҙәре етәкселеге. Ә юғары командование Харьков оборона штабында булды. Уларҙың һатылғанлығы бик тә яҡшы күҙгә ташлана ине. Беренсенән, фронт шул тиклем тарҡау, Ҡыҙыл Армия частары араһында элемтә юҡ, дошмандың ҡыҫымы аҫтында улар тәртипһеҙ рәүештә, бер ниндәй етәкселекһеҙ сигенгәйне. Оборона штабының Харьков йүнәлешендәге тарҡау ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе тәртипкә килтерерлек йүнле фарманы булманы”, — тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Усман Тереғолов.

Ҡыҙыл Армия частары Деникин ғәскәре ҡыҫымына сыҙай алмай, паникаға бирелеп сигенә. Тиҙҙән Харьков ҡалаһын ҡалдырып китә. Харьковтан иң аҙаҡ Башҡорт бригадаһы полктары сыға. Тәүге эшелонда сығып, юлда ҡыҙылдар ташлап ҡасҡан ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы алып, Сумы ҡалаһына килгән бригада штабын ҡыҙылдар ҡорал менән ҡаршылай. Сумы чекаһы Башҡорт бригадаһы штабын, шул иҫәптән бригада командиры Сөләймән Ишмырҙинды ҡулға алып, бикләп ҡуя. Ҡыҙылдарҙың былдай оятһыҙ ҡыланышы арттағы эшелондар менән килеп еткән башҡорт яугирҙарын һуңғы сиккә еткерә. Эштең нимә менән бөтөрөн аңлаған ҡыҙылдар бригада штабын ирекә сығарырға мәжбүр була.

Июнь аҙағында Башҡорт бригадаһы Бахмач станцияһына ялға сығарыла. Бында Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлиди килә. Ул башҡорт яугирҙарына рәхмәт белдерә һәм бригада командиры Сөләймән Ишмырҙиндың хеҙмәтен билдәләп үтә:

ПРИКАЗ

По Башкирским войскам
№ 0642-I

2-го июля 1919 г. Станция Бахмач

1

Прибыв на Южный фронт, ознакомился с боевыми действиями 1-го и 2-го Стрелковых и 1-го и 2-го Кавалерийских Башкирских полков и их героическими подвигами при обороне Харькова. От имени Революционного Комитета Башкирской Советской Республики приношу благодарность всем красноармейцам-башкирам, принимавшим участие в этих тяжелых боях, вынесенных при крайне неблагоприятных условиях, которыми была обставлена оборона Харькова вообще.

Особенно благодарю Командира 1-го Стрелкового Башкирского полка Ишмурзина II-го, временно исполнявшего обязанности командира Бригады за умелое ведение операции с малым для войска ущербом; командира 2-го Стрелкового полка Исхакова за самоотверженность.

Шуны әйтеп үтергә кәрәк, 1919—1920 йылдарҙағы архив документтарында Ишмырҙиндар исемләп бирелмәгән. Әүхәҙей “Ишмурзин I”, ә Сөләймән “Ишмурзин II”, тип телгә алына. Зәки Вәлиди фарманында Сөләймән Ишмырҙиндың “Ишмурзин II” булараҡ яҙылыуы шунан килә. Ә бына Хәрби комиссариат фарманында Әүхәҙей Ишмырҙин “Ишмурзин I” тип бирелгән (фотоны ҡарағыҙ).

Бригада яңы килгән яугирҙар, командирҙар менән тулыландырыла һәм Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Дивизияның командиры итеп Ахлау Ахлов тәғәйенләнә, комиссары — Нуриәғзәм Таһиров. Зәки Вәлидиҙең бойороғо буйынса Сөләймән Ишмырҙин Көньяҡ фронттан Хәрби комссариат ҡарамағына күсерелә. Башҡортостанға ҡайтҡас, Бәләбәйҙә ойошторолоп ятҡан 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләнә.

1919 йылдың сентябрендә башҡорт ғәскәрҙәре, шул иҫәптән 3-сө Башҡорт кавалерия полкы, Петроградҡа ебәрелә. Ә Сөләймән Ишмырҙинды, ғәскәрҙәрҙе аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү бурысын йөкмәтеп, Башсовнархозға күсерәләр. Бында ул хәрби заготовкалар бүлеген етәкләй, йәғни уға башҡорт ғәскәрҙәрен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү эше йөкмәтелә.

Сөләймән Ишмырҙин үҙен ҡыйыу, ауыр саҡта ла юғалып ҡалмаған, тәжрибәле командир итеп таныта. Көньяҡ фронтта сағында башҡорт һалдаттары araһында ҙур ихтирам, хөрмәт ҡаҙана. Башҡорт яугирҙары Сөләймән Ишмырҙинды армияға ҡайтарыуҙы һорап, Башревкомға мөрәжәғәт итәләр. 1919 йылдың 16 сентябрендә Башревком: “Довести до сведения военкомата о желании красноармейцев видеть Ишмурзина II в своих рядах”, — тип ҡарар ҡабул итә.

Әммә Сөләймәнгә ғәскәр сафтарында башҡа хеҙмәт итергә тура килмәй. Уның өсөн йәш, яңы аяҡҡа баҫып килгән республикала ла яуаплы эштәр етерлек була. Ҡуптән түгел генә эвакуациянан ҡайтҡан Башҡортостан хөкүмәте (Башревком) автономияны ғәмәлгә ашырыу өсөн тәжрибәле хеҙмәткәрҙәрҙе кантондарға ебәрә. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарын — кантон



Приказ № 54

войсковым частям и учреждениям Народного Комиссариата по военным делам Башкирской Советской Республики.

Г. Стерлитамак, 17 февраля 1920 года.

Сего числа я, выздоровев, вступил в исполнение своих обязанностей. По всем делам службы обращаться ко мне.

Врем. исп. обязан. Народного Комиссара по военным делам Б. С. Р. тов. Магазову обратиться к исполнению своих прямых обязанностей Заведующего Политотделом Башнарвоенкомата.

Врид. Народного Комиссара по военным делам Б. С. Р. А. Ишмурзин.

Военный Руководитель Ярошевич.

*Башҡортостан хәрби комиссариатының 54-се фарманы.*
*1920 йылдың 17 феврале*

революцион комитеттарын ойоштороу көнүҙәк мәсьәләгә әйләнә. 1919 йылдың көҙөндә Сөләймән Ишмырҙин Башҡортостандың төньяғындағы Ҡөҙәй кантревкомына эшкә ебәрелә.

1920 йылдың мартында Үҫәргән кантонында урыҫ коммунистары законһыҙ рәүештә съезд үткәреп, башҡорттарҙы ҡорал менән ҡурҡытып, яңы кантревком һайлай, республика составынан сығыу өсөн агитация башлай. Уларҙы был эшкә Ырымбур губкомы ҡоторта. Башҡортостан хөкүмәте (Башревком) тиҙ арала билдәле башҡорт эшмәкәрҙәре Хәлим Әмиров, Ибраһим Исхаҡов һәм Сөләймән Ишмырҙин составында комиссия төҙөп, Үҫәргән кантонына ебәрә. Зәки Вәлиди С.Ишмырҙинды Үҫәргән кантоның рәйесе итеп тәғәйенләй. Ҡомиссия ғәскәр менән килеп, фетнәселәрҙе ҡулға алып, урындағы комячейкаларҙы тарата, кантонда Башҡортостан автономияһы власын яңынан тергеҙә. Тиҙҙән Башревком Ишмырҙинды Башҡортостандың тағы бер ауыр төбәгенә, Өфө губкомы менән тартҡылашҡан Табын кантонына рәйес итеп тәғәйенләй.

1920 йылдың көҙөнән Сөләймән Ишмырҙин Башҡортостандың аҙыҡ-түлек эштәре буйынса халыҡ комиссары вазифаһын үтәй, БашЦИК ағзаһы итеп һайлана. Әммә 1921 йылда Ишмырҙиндың баш осонда ҡара болоттар ҡуйыра башлай. Обком уны аҡтар яғында йөрөгәне өсөн партиянан сығара. 1922 йылда вазифаһынан бушатыла. Республика ревтрибуналы уны 15 йылға иркенән мәхрүм итеү тураһында хөкөм ҡарары сығара. Башҡорт эшмәкәрҙәре Мәскәүгә мөрәжәғәт итеп, Сөләймән Ишмырҙинды оло бәләнән ҡотҡарып алып ҡала. Сөләймән Ишмырҙиндың власть тарафынан ҡаты хөкөмгә тарттырылыуы ағаһы Әүхәҙей Ишмырҙиндың Төркөстандағы большевиктарға ҡаршы эшмәкәрлеге

менән туранан-тура бәйле була, күрәһең. Сөнки тап 1922 йылда Ә.Ишмырҙин ҡыҙылдарға әсиргә төшөп, Мәскәүгә килтерелеп үлтерелә. Ошоноң шауҡымы Сөләймәнгә лә тейгән, ахыры. Бынан тыш, Сөләймән, анкетаһында яҙыуынса, ағаһы Әүхәҙей Ишмырҙиндың улы Исхаҡты тәрбиәләй.

Сөләймән Ишмырҙин артабан Башҡортостанда юғары вазифалар биләмәй, дәүләт эшенән ситләштерелә. 1926 йылға тиклем ул Ленин исемендәге Өлкә тәжрибәле мәктәбендә завхоз булып эшләй. Риф Мифтахов яҙыуынса, һуңынан ул Башглавполитпросвет бүлегендә эшләгән. 1932 йылда С.Ишмырҙин Мәскәүгә, “Союззолото” берекмәһенә эшкә күсә. Башҡортостанда көн бирмәгәс, баш ҡалала эҙәрләмәҫтәр, тип уйлағандыр, моғайын. Әммә ҡәһәрле 1937 йылда ҡулға алынып, иркенән мәхрүм ителә, лагерҙа үлеп ҡала.

Архив документтарын ҡарап ултырғанда Әүхәҙей менән Сөләймән Ишмырҙиндарҙың өлкән ағаһы Ишбулдының да (1887 йылғы) милли хәрәкәттә ҡатнашҡанлығы хаҡында мәғлүмәттәр осраны. Ул 1919 йылдың февраль-март айҙарында Башҡорт хөкүмәтенең хужалыҡ бүлегендә эшләгән. Ишбулды Ишмырҙин 1937 йылдың 28 ноябрендә ҡулға алынып, 10 йылға иркенән мәхрүм ителә. 1937 йылдың 28 ноябрендә Ишмырҙиндарҙың кесе ҡустылары Йосоп та ҡулға алына. Колхоз рәйесе булып эшләгән уҙаманды шулай уҡ 10 йылға хөкөм итәләр. Ишбулды менән Йосоп Ишмырҙиндарҙы тик 1964 йылда ғына реабилитациялайҙар. Ә бына Әүхәҙей менән Сөләймән Ишмырҙиндарҙы аҡлау тураһында мәғлүмәткә юлыҡҡан юҡ әле.

Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш юлында йәнен фиҙа ҡылған Әүхәҙей Ишмырҙин, милли хәрәкәттәге эшмәкәрлеге өсөн репрессия ҡорбандары булған Сөләймән һәм Ишбулды Ишмырҙиндарҙың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү беҙҙең быуындың бурысы.

**Ҡулланылған сығанаҡтар:**

НА РБ. Ф.387. Оп.3. Д.64. Л.13, 13 об.
НА РБ. Ф.1201. Оп.4. Д.4. Л.16.
НА РБ. Ф.78. Оп.1 Д.17. Л.4.
НА РБ. Ф.629. Оп.1. Д.1303. Л.15—15 об.
НА РБ. Ф.1107. Оп.1. Д.7. Л.2.
НА РБ. Ф.1107. Оп.1. Д.25. Л.21.
НА РБ. Ф.1780. Оп.1. Д.9. Л.5.
А.А. Валидов — организатор автономии Башкортостана (1917—1920). Ч.1. Уфа, 2005. 170, 218, 288, 293, 297, 298, 310, 315, 334-се биттәр.
*Вәлиди Туған Ә.Ә.* Хәтирәләр. Өфө, 1996. 388, 472, 473-сө биттәр.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917—1925). Т.1. Уфа, 2002. 304, 344, 352-се биттәр.
Шунда уҡ. Т.2. Ч.1. Уфа, 2002. 260, 469, 497, 561, 570, 579, 596-се биттәр.
Шунда уҡ. Т.2. Ч.2. Уфа, 2003. 54, 151—158, 176, 182, 203, 227, 229, 236, 268, 283, 412, 430-се биттәр.
Шунда уҡ. Т.3. Ч.1. Уфа, 2004. 201, 440, 441, 504, 619, 668-се биттәр.
Шунда уҡ. Т.3. Ч.2. Уфа, 2006. 24, 155, 169, 174—179, 383, 562-се биттәр.
Шунда уҡ. Т.4. Ч.1. Уфа, 2008. 57, 265, 282, 484-се биттәр.
*Риф Мифтахов.* Ишмырҙиндар яҙмышы //Башҡортостан. 1990 й., 22 декабрь.
*Сулпан Иманғолов.* Әүхәҙей ҡылысы // Шоңҡар. 1995. № 2.